*Радик ХӘКИМЙӘН*

# Шатлығы ла, ҡайғыһы ла йөрәктәрҙе ҡағып уҙа

## ӘЙ, БЫЛ ТОРМОШ

Әй, был тормош! Ниңә хәҡиҡәттә
Гел хаталар аша өйрәтә?!
Һабаҡ бирә мең ғазаптар менән,
Һыуға һала, утта көйрәтә.

Тормош — бизмән, унан һис бер биҙмәм,
Үлсәй бит ул, — кемдең кемлеген;
Үҙ бәйәһен бирә һәр береһенә,
Еркәйенә бәйләй кендеген.

Үҙе теләгәнсә һынай беҙҙе,
Тормош — даръя, ә мин бер елкән;
Ҡаршы йөҙәм ярһыу ташҡындарға,
Яҙмыш тигәндәре шул микән?!

Тормош — көрәш, тотош бәйге бит ул,
Һүндермәһәк ине күмерен;
Халҡым өсөн, тыуған илем өсөн
Уттай янып үтһен ғүмерем.

## ТЫУҒАН ЯҠТАРҒА АШҠЫНАМ

Имәнтау киңлектәрендә
Нурланып таңдар ата,
Аҡ томанда — аҡ биләүҙә
Ауылым — Ҡыйғы ята.

Ана Буҙат болондары,
Еләкленең ҡырҙары,
Оҙонтүбә өҫтәрендә
Яңғырай йәшлек йырҙары.

Йырактарҙан: “Һаумы?” — тиеп
Мәхмүттау ҡаршы ала,
Түбәндәрәк борғаланып
Әй менән Ыйыҡ аға.

Салауаттың, Пугачевтың
Эҙҙәре ҡалған бында,
Эшсән, тырыш халыҡ йәшәй
Минең тыуған яғымда.

Диңгеҙме ни — баҫыуҙарҙа
Сайҡалалар игендәр,
Таң уятамы ҡоштарҙы,
Таңдарҙымы — килендәр?!



*Шағир Радик Хәкимйән (Радик Закирйән улы Хәкимйәнов) 1941 йылда Ҡыйғы районының Үрге Ҡыйғы ауылында тыуған.*
*Шиғырҙары республикабыҙҙың гәзит-журналдарында йыш баҫыла, радио аша яңғырай. Уның күп кенә шиғырҙарына Башҡортостан һәм Татарстан композиторҙары көйҙәр яҙған.*
*Радик Хәкимйән 4 шиғри йыйынтыҡ авторы.*



Тыуған яҡтарға ашҡынам.
Һағындырған ҡыйғылар,
Яҡташтар менән күрешһәм,
Онотола ҡайғылар.

Урмандарым ҡосағында
Йәшемде һөртә елдәр,
Ана баласаҡ шишмәһе —
Йәшлегем үткән ерҙәр.

Барыһы ла яҡын, изге,
Барыһы ла ҡәҙерле,
Төйәгемдең һәр биҙәге
Шағир иткән йәнемде.

Һағыштар өҙһә йөрәкте,
Бик йыш ҡайтам Ҡыйғыға,
Бында бит тула күңелем,
Йырҙарға, моң-тойғоға!

## ЕРЕМ

Ер ҡәҙерле, изге һәр кешегә,
Тормошҡа ул күпме йәм биргән,
Шаулап аҡҡан инеш-йылғаларға,
Һәр шишмәгә сафлыҡ, тәм биргән.

Ҡатын-ҡыҙға биргән сибәрлекте,
Ир-егеткә ғәйрәт-көс биргән,
Ҡоштарыма биргән сихри моңдар,
Сабыйҙарға алһыу төҫ биргән.

Көн тыуғанда үркәстәргә бағам,
Тауҙарымдың хәлен белергә,
Һәм уйлаймын,
ер бит шундай йомарт,
Ни бирәбеҙ әле беҙ ергә?!
Ни бирәбеҙ?!

## ҠЫЙҒЫЛАР — ҠЫЙЫУҘАР

Тәбиғәт ҡырыҫ булғанға,
Йәшәй бында ҡыйыуҙар,
Ҡайнар, ярһыу йөрәклеләр,
Эшкә уңған ҡыйғылар!

Ҡуҡырыраҡ һөйләшһә лә,
Күңелдәре ап-асыҡ,
Ҡыйғыларҙың йөрәгенән,
Ялҡыны тора ташып.

Беҙҙәгеләй сибәр ҡыҙҙар,
Башҡа ерҙә юҡтыр ул,
Егеттәрҙең ҡыйғырҙары —
Дөрләп янған уттыр ул!

Йыр-моңға ла дәртле улар,
Егәрле һәм ягымлы,
Әй буйының бөркөттәре —
Даны тыуған яғымдың.

Беҙҙең яҡтың, йәмле яҡтың,
Шишмәләре лә татлы,
Баҫыуҙары, болондары,
Урман-тауҙары затлы!

Ҡыйғыларҙың йолаһы бар,
Оло хөрмәт — дуҫтарға!
Үҙенсәрәк сихри итеп,
Һайрай бында ҡоштар ҙа.

Ҡыйғылар ул — ғорур халыҡ,
Намыҫлы, изгелекле,
Һалҡында ла гөл үҫтерә,
Һөйәләр гүзәллекте!

## ҒҮМЕР ЮЛЫ

Тормош мине һынар өсөн
Сәфәрҙәргә оҙатҡан.
Донъяның күпме серҙәрен
Аңлағанмын аҙаҡтан.

Яҡшы-яман юлдаш булған
Юлдарымда, сәфәрҙә.
Улар мине өйрәткәндәр
Был донъяла йәшәргә.

Мәғрур тауҙар ныҡлыҡ бирҙе,
Ҡайындарым — аҡлығын.
Болон-ҡырҙар — күркәмлеген,
Шишмәләрем — паклығын.

Елдәр бирҙе етеҙлеген,
Зәңгәр күгем — сафлығын.
Йөрәк аша үткән барыһы,
Ҡайғыларым-шатлығым.

Юғалтыуҙар аша килде
Юлдарымда — табышым.
Һуңлабыраҡ аңланым шул
Был донъяның ағышын.

Яҙмыш юлдарын үткәндә
Ҡалмаһын йөрәк талып,
Шишмәләр бит һис тынмайҙар,
Ағалар таштар ярып!

...Мин дә байтаҡ кәртә үттем,
Барҙыр күпме үтәһем?!
Һуңғы туҡталышҡа әле
Бар бит барып етәһем.